КОНТРОЛЬНЫЙ ЭКЗЕМПЛЯР

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Хеҙмәт БАЙРАҒЫ

Газета 1931 йылдың 1 ноябренән сыға

Башҡорт АССР-ы КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 52 (6491) 1988 йыл, 4 май, шаршамбы Хаҡы 3 тин.

УРМАН ҺӘМ БАҠСА АЙЛЫҒЫ

КПСС райкомы һәм халыҡ депутаттарының район Советы башҡарма комитеты майҙа урман һәм баҡса айлығы иғлан итте. Ул «Тыуған ерҙең йәшел биҙәген һаҡларға һәм арттырырға!» тиган девиз менән үтәсәк.

Айлыҡ түбәндәге маҡсаттарҙан сығып иғлан ителде:

— яҙғы осорҙа йыллыҡ план күләмендә урман культуралары һәм һаҡлаусы урман полосалары булдырыу буйынса план заданиеларын һәм социалистик йөкләмәләрҙе үтәү;

— лесничество, лесхоз коллективтары араһында йәш үҫентеләрҙең үҫеп китеүенә һәм һаҡланыуына өлгәшеү буйынса социалистик ярыш ойоштороу;

— коллектив баҡсалылыҡты артабан үҫтереү, өй алды участкаларында емеш-еләк культуралары ултыртыу;

— ауылдарҙы йәшелләндереү ҙә халыҡтың массовый ҡатнашыуына өлгәшеү, шишмәләр, һыу яҡҡылыҡтары, автомобиль юлдары тирәләй ағастар ултыртыу;

— ауылдар тирәһендәге йәшел зоналарҙағы урмандарҙы тәрбиәләү һәм төҙөкләндереү өсөн предприятиелар һәм ойошмалар коллективтарына беркетергә;

— «Ишбүләк—Калинино» дәүләт урман һыҙатын реконструкциялау һәм аяҡҡа баҫтырыу буйынса эште тамамларға.

Райсовет башҡарма комитетында

Халыҡ депутаттарының район Советы башҡарма комитеты үҙенең сираттағы ултырышында Ә. Р. Күсәковтың үҙгәртеп ҡороу шарттарында эшмәкәрлек стилен һәм методтарын камиллаштырыу буйынса Яңы Ергән ауыл Советының эше тураһындағы отчетын тыңланы һәм тикшерҙе.

«Новый путь» колхозында хеҙмәтте ойоштороуҙың прогрессив формаһын индереү буйынса билдәле бер эш башҡарылған. Баҫыусылыҡта —6, мал һимертеүҙә—6, һауын гуртында—2, һарыҡсылыҡта — 6 звено аренда подряды буйынса эшләй. Һөҙөмтәлә дәүләткә ит һатыу буйынса беренсе квартал планы 112 процентҡа үтәлде.

Ауыл Советы башҡарма комитеты Иләстә комплекслы ҡабул итеү һәм медицина пунктарын төҙөү, Ергәндә балалар баҡсаһын киңәйтеү мәсьәләләрен ыңғай хәл итә алды.

Шул уҡ ваҡытта райсовет башҡарма комитеты ауыл Советы башҡарма комитетының эш стиле һәм методтары КПСС-тың XXVII съезы талаптары нигеҙендә аҡрын камиллаштырыла, үҙгәртеп ҡороу һәм билдәлелек ойоштороу эшмәкәрлегенең төп принциптарының береһенә әүерелмәгән, тип билдәләп үтте. Колхозда тотоноуҙарға ҡаршы көрәш әлегә йомшаҡ алып барыла, беренсе кварталда бер центнер һөт етештереүгә киткән хеҙмәт тотоноуҙары планға ҡарата 149, һыйыр малдарынан артым алыуҙа — 102, сусҡаларҙан — 115 процент тәшкил итте, дәүләткә һөт һатыуҙың тәүге ике айлыҡ планы үтәлмәне.

Советта культура-масса эштәрен, физкультура һәм спортты киң йәйелдереүгә етерлек иғтибар бирелмәй, хоҡуҡ тәртибен нығытыу буйынса тейешле саралар күрелмәй, былтыр колхоздан 9 кешенең медицина айныҡҡысында булып сығыуы, алты кешенең бал әсетеүе, самогон ҡыуыуы асыҡланды.

Ауыл Советында ойоштороу-масса эшенең тейешле кимәлдә булмауы депутаттарҙың юғары активлыҡ күрһәтмәүе менән аңлатыла. Мәҫәлән, халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү сфераһының торошон тикшереү буйынса үткәрелгән сессияла ни бары ике депутат ҡына сығыш яһаған. Ҡарарҙар, тәҡдимдәр, тәнҡит иҫкәрмәләре һәм һайлаусылар наказдарының үтәлеүе тураһында депутаттарға даими хәбәр ителмәй. Йыл буйына ни бары бер генә депутат запросы яһалған. Депутат постары һәм группалары, башҡарма комитет комиссиялары, йәмәғәт етәкселек итеү һүлпән ҡуйылған.

Райсовет башҡарма комитеты эш стилен һәм методтарын үҙгәртеп ҡороу буйынса Яңы Ергән ауыл Советының эшмәкәрлеген ҡәнәғәтләнерлек түгел, тип тапты һәм уларҙы партияның XXVII съезы талаптарына, КПСС Үҙәк Комитетының ғинуар һәм июнь (1987 йыл) ҡарарҙарына ярашлы рәүештә камиллаштырыуҙы талап итте һәм тырышлыҡты коллектив тормошоноң бөтә сфераларын үҙгәртеп ҡороу менән бәйле практик бурыстарҙы хәл итеүгә йүнәлтергә ҡушты.

Райсовет башҡарма комитеты, Таналыҡ ауыл Советы халҡына сауҙа хеҙмәте күрһәтеүе тураһындағы мәсьәләне ҡарап, был эштәге етди кәмселектәрҙе билдәләне. 1987 йылда ваҡлап һатыу тауар әйләнеше планы ни бары 95,5 процентҡа ғына үтәлгән. Ул башҡа йылдарға ҡарағанда түбән. Ауыл Советы буйынса бер кешегә 505 һум 45 тинлек тауар һатылған, ә район буйынса был күрһәткес —694 һум.

(Башы. Аҙағы 2-се биттә).

Гөрләй баҫыуҙар

«Хәйбулла» совхозы механизаторҙары 5959 гектар майҙанда иген культуралары һәм бер йыллыҡ үлән сәсте. Комсомол бүлексәһенең 6-сы бригадаһында бөтә сәсеү агрегаттары ла баҫыуҙарға сығарылды. Хәҙер унда 44 агрегат эшләй.

Агитаторҙар Р. Сәитова, М. Солтанова «Молния» һәм «Боевой листок»тар сығара, унда хеҙмәт алдынғыларының еңеүҙәре тураһында һөйләй. Сәсеү уңғандары хөрмәтенә Хеҙмәт даны флагы күтәрелә. Үҙәк бүлексәнән А. Денисов, Р. Хәмәтдинов, Хоҙайбирҙин бүлексәһенән Н. Иҫәнбаев шундай хөрмәткә лайыҡ булды. Улар көндәлек нормаһын 120—130 процентҡа үтәй. Шулай уҡ З. Ҡадиров менән С. Булатов та һәйбәт эшләй. Улар икәүләп 600 гектар майҙанға культуралар сәсте.

В. СУХОДОЛОВ,
совхоздың профком председателе.

Көнүҙәк бурыстар

30 апрелдә КПСС райкомында ойошмаларҙың партия-хужалыҡ активы кәңәшмәһе булып үтте. Мал ҡышлатыу, быйылғы дүрт айҙа малсылыҡ продукциялары етештереү һәм һатыу буйынса эшкә йомғаҡ яһалды. РАПО советы председателенең малсылыҡ буйынса урынбаҫары **Ф. С. Хәкимов** информация менән сығыш яһаны.

Райсовет башҡарма комитеты председателенең беренсе урынбаҫары, РАПО советы председателе **З. Н. Кадиков** кәңәшмәлә ҡатнашыусылар алдында баҫыу эштәренең барышы һәм ун икенсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылында игенселәр алдында торған бурыстар тураһында һөйләне.

Тоҡомсолоҡ эше буйынса «Башҡортостан» производство берекмәһенең баш ветеринария врачы **М. Ш. Мамлиев** районда дәүләт-тоҡомсолоҡ кооперативын төҙөү һәм уның бурыстары тураһында аңлатма бирҙе.

Кәңәшмәлә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы председателе **Ф. В. Солтанов** ҡатнашты һәм сығыш яһаны.

Кәңәшмәне КПСС райкомының беренсе секретары **М. Х. Шаһиев** алып барҙы һәм сығыш яһаны.

Дым ҡаплау барышы

(3 майға)

Беренсе графала — хужалыҡтар, **икенсеһендә** — дым ҡапланған (планға ҡарата процентарҙа).

Колхоздар:		Совхоздар:	
Фрунзе исем.	100	«Аҡъяр»	88
«Новый путь»	100	«Таналыҡ»	100
«Кр. доброволец»	100	«Хәйбулла»	100
Калинин исем.	100	«Маҡан»	100
«Красное знамя»	14	«Матрай»	100
Ленин исем.	22	«Степной»	100
«Һаҡмар»	38		
Салауат исем.	23	**Район буйынса:**	87

Райондың күпселек хужалыҡтары дым ҡаплауҙы уңышлы үткәрҙе һәм шунда уҡ культивация уҙғарып, иген, бер йыллыҡ үлән һәм силос культуралары сәсеүгә төштө. «Хәйбулла» совхозы игенселәре үҙҙәренең сәсеү агрегаттарын баҫыуҙарға берҙәм сығарҙы. Улар 5959 гектар майҙанда, йәғни планға ҡарата 48 процент, иген һәм бер йыллыҡ үлән сәсте лә инде. «Таналыҡ» механизаторҙары — 3000 гектарҙан ашыу, маҡандар 2000 гектар майҙанда сәсеү үткәрҙе. Тотош район буйынса сәселгән майҙан әлегә 14055 гектар тәшкил итә.

«Аҡъяр» совхозында (баш агрономы Һ. Кәипов) баҫыу эштәре һүлпән бара. Калинин исемендәге колхозда (Р. Дәүләтбаев) сәсеүҙе аҡрын башлап ебәрҙеләр. «Красное знамя» колхозы эшсәндәре (М. Волжанин) һаман ҡыҙыулата алмайҙар, ә была уларҙың күршеләре Ленин исемендәге колхоз (М. Бусалаев) бер тигеҙ шарттарҙа техниканы юғары етештереүсәнле файҙалана.

1 МАЙҘЫ БАЙРАМ ИТЕҮ

Ошо яҙғы көн иртәһендә Аҡъяр ауылы урамдары күңелле музыка, демонстранттарҙың шат тауыштары, союздаш республикаларҙың флагтары менән байрам колоннаһы башында килеүсе мотоциклдарҙың геүләүенә күмелде. Яҙғы туғай сәскәләрен хәтерләтеп, төрлө төҫтәге шарҙар, флагтар, транспаранттар тантаналылыҡты тағы ла арттыра.

Байрам колонналары райсовет башҡарма комитеты алдындағы майҙанға теҙелә. Ошонда район үҙәге ойошмалары һәм предприятиелары хеҙмәтсәндәренең, мәктәптәр һәм СПТУ уҡыусыларының митингыһы һәм Беренсе Май демонстрацияһы булды. Һуңынан художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнашыусылар тарафынан концерт күрһәтелде.

* * *

Шул уҡ көндә КПСС райкомы бюроһы, райсовет башҡарма комитеты ағзалары В. И. Ленин һәйкәленә сәскәләр һалды.

ҺҮРӘТТӘ: 110-сы СПТУ уҡыусылары демонстрацияла.

Р. БАЙМУРЗИН фотоһы.

Борсоулы сигнал

ЯҠЫНСА...

«Агропромхимия» район берекмәһе работниктары ашығыс рәүештә Сара станцияһынан колхоздар һәм совхоздарға минераль ашламалар ташый. Ләкин ҡиммәтле йөк үлсәнмәй, яҡынса тейәп оҙатыла. Шуға күрә ҡағыҙҙа яҙылған менән килтергән йөк араһында ике тоннаға яҡын айырма килеп сыға.

Мәҫәлән, шофер Дроботов 52—92 номерлы КамАЗ машинаһында «Таналыҡ» совхозына нитродиаммофос килтерә. Уның накладнойында йөктөң ауырлығы 10 тонна тип күрһәтелә. Контроль үлсәүҙән һуң йөктөң 7,9 тоннанан ашыу булмауы асыҡлана. «Агропромхимия» район берекмәһе председателе М. Юнысовҡа быға иғтибар итергә һәм тейешле тәртип булдырырға кәрәк.

Р. ХОҘАЙБИРҘИН,
район халыҡ контроле комитеты председателе.

Партия ойошмаһы: стиль һәм методтар

ПАРТИЯ ЭШЕНДӘ БИЛДӘЛЕЛЕК

Билдәлелек — аныҡ тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү, һайлап ҡуйылған кешеләрҙең йәмәғәтселек алдында даими отчеты, ғәҙеллекте күҙәтеү өсөн хеҙмәтсәндәр яғынан дөйөм контроль ул. Бүребай партия ойошмаһында был тәңгәлдә эштәр нисек бара?

Партия йыйылыштары күпселек осраҡта цехтарҙың активтарын, производство алдынғыларын, предприятие белгестәрен киң йәлеп итеп үткәрелә. Коммунистарға әҙерләнеү мөмкинлеген биреү өсөн уларға партия йыйылыштарының көн тәртибе алдан еткерелә. Коммунистарҙың үткән партия йыйылыштарында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлеү барышы тураһындағы информацияларын, уларҙың тәнҡитле иҫкәрмәләрен тыңлау практикаға индерелә. Йыйылыштарҙа партком тарафынан ҡабул ителгән ҡарарҙар менән таныштырыла.

Бүребай руда идаралығының партия ойошмаһында кадрҙарҙың тапшырылған эш өсөн яуаплылығын күтәреү буйынса билдәле бер эш алып барыла. Партком ултырыштарында, цех партия ойошмаһы бюроларында, асыҡ партия йыйылыштарында етәкселәрҙең тапшырылған эштәре нисек үтәүҙәре тураһындағы отчеттары тыңланма.

Партия тарафынан билдәләнгән мөһим проблемалар кадрҙар менән эшләүҙе тамырынан үҙгәртеп ҡороуҙы, юғары компетентлы, политик яҡтан өлгөргән, мораль яҡтан саф булған етәкселәр һәм белгестәрҙең яңы отрядын тәрбиәләргә кәрәклеген күрһәтә. Был бурыҫты хәл итеү өсөн руда идаралығында кадрҙар резервын һайлап алыу буйынса ойоштороу эше үткәрелә.

Резерв өсөн күрһәтелгән кандидатуралар партком ултырышында тикшерелә. Етәкселәрҙе билдәләгән саҡта руда идаралығы парткомы һәм администрацияһы коллективтың йәш быуынына ҙур ышаныс күрһәтә. Өс йылда 25 йәш белгес етәксе итеп үрләтелде. Улар — А. П. Павлущенко, С. Н. Буднев, Г. Н. Юлуев, В. А. Мальцев, Д. А. Ғәйсин, З. А. Әҙелгилдин, И. Х. Асҡаров һәм башҡалар. Ҡатын-ҡыҙҙарҙы етәксе вазифаға ҡыйыуыраҡ тәҡдим итә башланылар, улар бөтәһе 10. Мәҫәлән, Л. И. Сенькина — хеҙмәт һәм эш хаҡы бүлеге начальнигы, Л. А. Хлудneва — байҡатыу фабрикаһы мастеры, Г. А. Мамаева — руда идаралығының план бүлеге инженеры, Р. П. Зәйнәғәбдинова — ремонт-тәъмирләү участкаһы мастеры, Ф. Н. Мальцева руда идаралығы конструкторы итеп билдәләнде.

Руда идаралығы парткомы һәм администрацияһы кадрҙар һайлап ҡуйғанда эшсенең производство спецификаһы буйынса белемен генә түгел, уның идея-теоретик аң дәрәжәһен, политик өлгөргәнлеген, үҙенең коллективында тәрбиә эше алып бара алыуын да иҫәпкә ала.

Коллективта резервтар әҙләүгә даими иғтибар бирелә. Хужалыҡ итеү һәм идара итеүҙең яңы методтарының партия эшен үҙгәртеп ҡороу һәр участкала демократлаштырыу, билдәлелекте тәрәнәйтеү менән тығыҙ бәйләнештә тормошҡа ашырылыуы бик мөһим.

Г. ЖУРАВЛЕВ,
партком секретары.

5 майҙа Карл Маркстың тыуыуына 170 йыл тула (1818—1883)



КАРЛ МАРКС. Рәссамы Т. Атаев. «Плакат» нәшриәте.

Райсовет башҡарма комитетында

Ауыл халҡына төҙөлөш материалдары, бигерәк тә цемент, шифер, рубероид, штакетник, быяла, ағас материалдары бик әҙ күләмдә һатыла. Төҙөлөш материалдарын һаҡлау һәм һатыу өсөн майҙансыҡ төҙөү оҙаҡҡа һуҙыла.

Үҙәк усадьбала йәмәғәт туклanыуы предприятиеһының кондитер, кулинар изделиелары, ярым фабрикаттары һәм башҡа продукциялары етештерелмәй һәм һатылмай, ашхананың эҙәүәте эффектлы файҙаланылмай. Халыҡтан алынған ауыл хужалығы продуктарын һатыу ойошторолмаған.

Магазиндар тауар әйләнеше пландарын тигеҙ үтәмәй, һатыусылар, бигерәк тә Үҙәк усадьбанан, Сибайға район-ара базаға һирәк бара, сауҙа предприятиеһында тауарҙар запасының ассортименты ярлы, уларҙы ташыу өсөн совхоз транспортты аҙ бүлә. Күсмә сауҙа насар ойошторолған.

Һатыусыларҙың эш режимын боҙоу осраҡтары бар, һатып алыусыларҙы алдау, тупаҫлыҡ күрһәтеү фактлары бөтөрөлмәгән. Совет, депутаттар һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары сауҙа хеҙмәтенән даими күҙәтеүҙе талап итмәй.

Таналыҡ ауыл Советының һәм Подольск сауҙа предприятиеһының халыҡҡа сауҙа хеҙмәте күрһәтеүҙе ойоштороу буйынса эше ҡәнәғәтләнерлек түгел, тип билдәләнде. Райсовет башҡарма комитеты уларҙан бөтә тәр халыҡ күлланыуы тауарҙарын һатыуҙы ойоштороуҙы тамырынан яҡшыртыуҙы талап итте. Совхоз директоры Ә. Ғ. Салауатов ептәштең Подольск һәм Савельевка ауылдарында магазиндар төҙөләсәк, фермаларҙа буфеттар һәм магазиндар асыу өсөн биналар бүленәсәк, район-ара базанан тауарҙар ташыу өсөн тейешле күләмдә автотранспорт биреләсәк, магазиндарға капиталь һәм ағымдағы ремонт үткәреүҙә ярҙам күрһәтеләсәк, тигән белдереүе иғтибарға алынды. Йәйге науыҡтырыу эштәрен, балалар һәм үҫмерҙәрҙең йомғат өсөн файҙалы хеҙмәтен ойоштороу тураһындағы мәсьәлә тикшереп, халыҡ депутаттарының район Советы башҡарма комитеты балалар науыҡтырыу учреждениелары йәйге сезонға әҙерләү буйынса айлыҡ иҫлан итте, ауыл һәм поселок Советтары башҡарма комитеттарынан, хужалыҡтар, предприятиелар, халыҡ мәғарифы бүлегенән пионерҙарҙың ял һәм хеҙмәт лагерҙарын 25 майға тиклем ҡабул итеүҙе, улар базаһында райондың урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре уҡыусыларын ауыл хужалығында етештереүсәнле хеҙмәткә киң йәлеп итеүҙе талап итте.

Граждандарҙың шәхси ярҙамсы хужалыҡтарын үҫтереү буйынса өҫтәмә саралар тураһындағы мәсьәлә ҡаралды. Райсовет башҡарма комитеты ҡарарында халыҡтың мал-тыуарын—азыҡ, көш-ҡортто ем менән тәьмин итеүҙе тамырынан яҡшыртыу, шартлы һәр баш малға 0,4—0,5 гектар иҫәбенән бесән сабыу һәм мал көтөү өсөн участка бүлеп бирелә. Совхоздарға эгәр көтөүлектәр майҙаны етерлек булмаһа, халыҡтың малын көтөү һәм уның өсөн азыҡ әҙерләү йәһәтенән һөрөнтө ерҙәрҙең бер ни тиклем өлөшөнә культуралар сәсеү рөхсәт ителде, ә колхоздарға тәҡдим ителде. Шулай уҡ договор нигеҙендә уларға оҙайлы срок менән файҙаланыуға өҫтәмә ер участкаһы бүлеп бирелә, мал-тыуарҙы һәм көш-ҡортто ҡатнаш азыҡ менән тәьмин итеүгә айырыуса иғтибар бирелә.

Халыҡтың шәхси ярҙамсы хужалыҡтарына йәш малдар һәм көштар һатыуҙы киңәйтеү күҙҙә тотола. Уларҙы ҡасырау нормаһын билдәләү ауыл Советтары башҡарма комитеттарына йөкмәтелгән. Хужалыҡтарҙа халыҡҡа сусҡа балалары һатыу өсөн айырым фермалар ойоштороласаҡ. Был сусҡа балалары планлы үҙкиммәт хаҡы буйынса һатыласаҡ. Халыҡты ҡаҙ-өйрәк, бройлер себештәре менән тәьмин итеүгә айырыуса иғтибар биреләсәк.

Халыҡта мал-тыуар һәм көш-ҡорт һанын арттырыу кәрәклеге билдәләнде. Бының өсөн граждандарҙың шәхси ярҙамсы хужалыҡтарында уларҙы, кемдең ҡайҙа эшләүенә ҡарамайынса, аҫырау мөмкинлеге биреләсәк. Совхоздарға шәхси сектор малы өсөн көтөүсе бүлеп бирергә рөхсәт ителде, ә колхоздарға тәҡдим ителде.

Ҡуянсылыҡты һәм ҡортсолоҡто үҫтереү, халыҡтан ҡал һатып алыуҙы тәьмин итеү буйынса саралар күреү ҡәрәклеге тураһында билдәләнде.

РАПО-ның совхоздары, предприятиелары һәм ойошмаларына үҙҙәренең эшсәндәренә дәүләт капитал һалыуҙары иҫәбенә йәки һатҡан көндән алып 50 йыл эсендә уның хаҡының 40 процентын ҡайтарып түләп, үҙ средствона көртә-йәрәлары менән төҙөлгән усадьба тибындағы йорттарҙы һатыу рөхсәт ителде, ә колхоздарға һәм райпоға тәҡдим ителде.

Ауылда индивидуаль торлаҡ төҙөлөшөн һәм шәхси ярҙамсы хужалыҡтарҙы үҫтереү маҡсатында ауыл ерендә йәшәүсе граждандарға көртә-йәрәлары менән бергә йорттар һалып инеүгә, бәләкәй механизация средстволарын һатып алыуға кредит бирелә. Һыйыр һатып алыу өсөн кредит күләме — 1000 һумға, башмаҡ өсөн 500 һумға тиклем арттырылды.

Ауыл һәм поселок Советтары башҡарма комитеттары халыҡ араһында шәхси ярҙамсы хужалыҡты үҫтереү буйынса ойоштороу һәм аңлатыу эше алып барырға, был мәсьәләләрҙе ошо йылдың май айында граждандар сходтарында, коллективтар йыйылыштарында, Советтар сессияларында ҡарарға тейеш.

Профсоюз тормошо

ПРЕДСЕДАТЕЛЬ БУЛЫУЫ ЕҢЕЛМЕ?

Һеҙ тәүге тапҡыр профсоюз комитеты етәксеһе итеп һайландығыҙ. Эште ниҙән башларға йыйынаһығыҙ: эшселәрҙең ышанысын аҡлау, был яуаплы эште лайыҡлы башҡарыу өсөн нимә эшләргә кәрәк? Был массовый ойошма етәксеһе итеп һайланған, хеҙмәт коллективының ышанысына лайыҡ булған һәр кем үҙенә шундай һорау ҡуялыр һәм был осраҡта, тәбиғи тулҡынланыу киҫәһенән, уңышлы эшләү өсөн үҙ бурыстарың һәм хоҡуҡтарың менән ентекләп танышырға, профсоюз райкомы пленумдары эшендә, төрлө комиссиялар эшмәкәрлегендә ҡатнашыу тәжрибәһен тупларға кәрәк.

Проблемалар етерлек, әлбиттә. Профсоюз комитеттары хеҙмәтсәндәрҙең мәнфәғәтен яҡлауҙы беренсе планға ҡуйҙы һәм ҡуя. Профсоюз комитеты эшмәкәрлегенең асылы тап бына шунда ла инде.

«Таналыҡ» совхозының профсоюз комитеты үҙенең эшмәкәрлегендә цех комитеттарына һәм профгруппаларға таяна. Әлегә улар үҙ бурыстарын ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына үтәй. Председатель тулыһынса участка етәксеһенә буйһонғанға күрә, профсоюз комитеты ни бары «яза бирә»: балды көметә, квартира сиратын артҡа күсерә. Ә бына хеҙмәтсәндәрҙең хоҡуҡтарын яҡлауҙы уларға ышанып тапшырмайбыҙ, сөнки улар үҙҙәре лә эшселәрҙән тора.

Хужалыҡтың профсоюз комитеты ла шундай уҡ хәлдә. Уға инициатива күрһәтеүе бик ҡыйынға тура килә. Ҡарарҙар йыш ҡына ҡағыҙҙа ғына ҡала. Инициативаны тормошҡа ашырыу өсөн уның аҡсаһы ла, мөмкинлектәре лә юҡ, ә администрация «мөһимерәк» эштәр менән мәшғүл.

Профком ултырыштарының берһендә ҡайһы бер эшселәрҙең өйҙәрен ремонтлау, хеҙмәт шарттарын яҡшыртыу тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Ләкин ул тормошҡа ашманы, сөнки совхоз директорының аҡса бүлмәне, йорттар бөгөнгәсә ремонтланмай тора. Ә малсылыҡ биналарын ремонтлау, шулай уҡ төҙөү өсөн аҡсаһы ла, кешеләре лә һәр ваҡыт табыла. Хеҙмәт кешеһе тураһында хәстәрлек инә икенсе планға ҡалдырыла. Һөҙөмтәлә профсоюз комитеты ғәйепле булып ҡала инициатива күрһәтмәй, йөнөһе. Башҡаларҙан талап итеү өсөн үҙенә ҡарата ла талапсан булырға, башҡаларға өлгө күрһәтергә кәрәк.

Үҙгәтеп ҡороуҙың хәҙерге этабында профсоюз комитеты өсөн эштәр етерлек. Ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн халыҡтың ышанысын яулырға, администрацияның һәм партия комитетының ярҙамын тейәрға кәрәк. Беҙҙе йыш ҡына администрация «кәйеф кәйләргә» ҡушалар, ҡайһы бер эштә хатта талап итәләр, йөнөһе, производство өсөн шулай кәрәк.

Хәҙер бөтә осорҙағыһына ҡарағанда ла активыраҡ, кешеләрҙең мәнфәғәтен яҡлауҙа ныҡышмалы булырға, билдәлелекте тулыһынса файҙаланып, хеҙмәт коллективындағы бөтә киреҫкелекте күренештәргә ҡаршы ҡыйыу, асыҡтан-асыҡ, тулы көс менән көрәшергә ваҡыт. Уйлап тормайынса тауыш биреү, тормоштағы киҫкен мәсьәләләрҙән ситләшеү, ярым дөрөҫ, я ҡайһы бер осраҡта хатта ялған күренештәргә килешеп ҡарау заманы үтте.

Хеҙмәт коллективы вәкиле, профком етәксеһе һәр ваҡыт һәм һәр ерҙә, профком һәм төрлө комиссиялар ултырыштарында, профсоюз ағзалары менән аралашҡанда һәм төрлө тикшереүҙәр ваҡытында, вазифалы кешеләр менән осрашҡанда ете йәм эшлекле, активлы булырға тейеш. Профсоюз Уставы тарафынан бирелгән беҙҙең хоҡуҡтар тураһында ҡыйыуыраҡ өндәшергә, эшселәрҙең намыҫын ҡурҡмай яҡларға ваҡыт. Былардың барыһы профком ағзаларына һәм уның председателенә яңылыҡты, алдынғы ҡарашты, экономикала, культурала, социаль сфералағы ыңғай яҡҡа үҙгәрештәрҙең киң программаһын эффектлыраҡ тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итәсәк.

Профсоюз комитетының эшен яҡшыртыу өсөн беҙ мәсьәләләр менән тәрәнерәк шөғөлләнергә, хеҙмәтсәндәрҙе производство менән идара итеүгә йәлеп итергә тырышабыҙ.

Н. КОРШУНОВ,
«Таналыҡ» совхозының профком председателе.

ЕТДИ ҠАРАНЫ ЛАР

Быйыл ВЛКСМ Үҙәк Комитеты бюроһының «Мәктәптәрҙең, СПТУ-ларҙың комсомол ойошмаларында, пионер дружиналарында үткәрелгән сараларҙы тәртипкә һалыу тураһында»ғы ҡарары нигеҙендә тәүге комсомол ойошмаларында ҙур ҡыҙыҡһыныу уятҡан ленинсы зачеттарҙа уңыштар ғына түгел, етешһеҙлектәр тураһында ла принципиаль һөйләшеү булды.

Был мөһим сараны үткәреүгә Байғускар һигеҙ йыллыҡ һәм башҡа мәктәптәр ҙә етди ҡаранылар.

Б. ҒӨМӘРОВА,
ВЛКСМ-дың район комитеты секретары.

МАЛСЫЛЫҠ — УДАР ФРОНТ!

Дәрт тә, дарман да бар

Беҙҙең сыҫка фермаһы коллективының хеҙмәт һөҙөмтәләре ябайынан булмаһы. Үрсем, артым алыу, шулай уҡ дәүләткә сыҫка ите тапшырыу буйынса планды үтәлмәне. Ә бына быйылғы йыл башында беҙҙең сыҫка ҡараусылар былтырғы менән сағыштырғанда һиҙелерлек һыныҡлыш яһаны. Яҡшы яҡҡа үҙгәрештәр бар. Мәҫәлән, әсәле-уллы Гавриловтар сыҫкалар һимертеүҙә эшләй. Февралдә уларҙың теркәмә буйынса тулайым артым 114 центнер тәшкил итте, был һәр малдарының һәр береһенең тәүлегенә уртаса 587 грамға артыуын күрһәтә, ә план — 370 грамм. Уңыш үҙенән-үҙе килмәй. Гавриловтар бөтә белемен һәм осталығын һалып эшләй. Икенсе бер сыҫка ҡараусы А. Урмеев та юғары артым алыуға өлгәшә.

Сыҫка ҡараусылар тырыш хеҙмәттәре һөҙөмтәһендә сыҫка ите тапшырыу буйынса беренсе квартал планын 225 процентҡа үтәне, 300 урынына 645 центнер сыҫка ите тапшырҙы. Бер баш сыҫканың уртаса тапшырыу ауырлығы 143 килограмм тәшкил итте.

Шулай ҙа коллективтың эшендә барыһы ла ыңғай бармай әле. Тулайым артым алыу буйынса беренсе квартал планы ни бары 65 процентҡа ғына үтәлде. Аренда подрядына күскәндә ғәмәлдә был мәсьәләне ыңғай хәл итеп буласаҡ, 1988 йылдың ғинуарынан хеҙмәтте ойоштороуҙың яңы формаһы индерелде. Совхоз администрацияһы менән договор төҙөлдө, йыллыҡ задание билдәләнде, бер центнер сыҫка ите һәм артым алыуҙың күпмегә төшәсәге асыҡланды. Әлегә тотоноуҙар доходҡа ҡарағанда артыҡ. Шулай ҙа беҙҙең коллектив юғары һыҙыҡҡа һөҙөмтәгә өлгәшергә ниәтләне. Сыҫкаларҙан үрсем алыу тәүге һынау буласаҡ, шуға күрә беҙ был осорға ентеклəп әҙерләнәбеҙ. Был иһә беҙгә бурысты ҡаплау мөмкинлеген бирәсәк.

С. ЛАТИПОВА,
«Хәйбулла» совхозының сыҫка фермаһы мөдире.

Беҙгә яуап бирәләр

„Кире алып ҡайттылар“

Газетабыҙҙың 9 апрелдәге һанында шундай баш аҫтында йәмәғәт хәбәрсеһе Ә. Әбделмәновтың мәҡәләһе баҫылып сыҡҡайны. Ул ауыл халҡынан йыйылған 1.5 центнер сифатлы майҙың бер кемгә лә кәрәкмәүе тураһында яҙғайны. Майҙы район әҙерләүҙәр контораһына һәм һөт заводына тапшырырға тырышып ҡарауҙар бушҡа булып сыҡҡас, уны ауыл халҡына кире таратып бирәләр.

Ауыл хуҙалығы продуктының сифаты һәм уны һатып алыу буйынса өлкән дәүләт инспекторы И. Насиров редакцияға шундай яуап хәбәрҙе: «Граждандар дәүләткә ҡағизә булараҡ, һөт һата һәм айырым осраҡтарҙа ғына һөт өстө, май, өйҙә әҙерләнгән сыр ташыра ала.

РСФСР Дәүләт агропромышленность комплексының 1987 йыл 4 майындағы «Халыҡтан һыйыр малы, ҡош, йорт ҡуяны ите, һөт һәм һөт продуктары һатып алыу тураһында»ғы положениеһында ит һәм һөт продуктары (шул иҫәптән май) ауыл халҡынан потребителдәр кооперацияһы тарафынан ғына һатып алына», тип әйтелә.

Дәүләт инспекторының яуабын район идараһы председателе Н. Никифоров та раҫлай. Ул былай тип яуап бирҙе: «Кире алып ҡайттылар» мәҡәләһенә яуап итеп әҙерләүҙәр контораһы майҙы колхоз һәм совхоздарҙан түгел, ә ауыл халҡынан ғына ҡабул итә, тип белдерәбеҙ».

Редакциянан: Ҡыҫҡа, аңлайышлы яуап. Бер ни тип тә әйтеп булмай. Тик бына редакцияға һәм май тапшырып уны кире алырға мәжбүр булған Ивановка ауылы халҡына (улар ҙа «ауыл халҡы» категорияһына инә түгелме?) ни өсөн әҙерләүҙәр контораһында артыҡ продукцияны ҡабул итмәүҙәре аңлашылмай. Был осраҡта кем яуаплы һәм ул тейешле яҙаһын алғанмы?

Интенсивлаштырыу курсы менән

ФӘН МЕНӘН БЕРЛЕКТӘ

БЫЙЫЛ Ленин исемендәге колхоз эшсәндәре алдында ҙур бурыстар тора. Тыуған илгә иген һатыуҙың культуралар буйынса дәүләт заказын үтәргә, етерлек күләмдә орлоҡ һалып ҡалдырырға һәм йәмғәт малсылығын, колхозсыларҙың мал-тыуарын азыҡтар менән тулыһынса тәьмин итергә кәрәк. Мал азығы етештереүгә башҡа йылдарға ҡарағанда ла күберәк иғтибар бирәсәкбеҙ. «Аҡһым» программаһы эшләнде. Унда мал азыҡтарын ҙур күләмдә (шартлы һәр баш малға 35 центнер азыҡ берәмеге) етештереүҙе генә түгел, уны аҡһым буйынса баланслау ҙа ҡүҙҙә тотола. Йәғни әҙерләнгән азыҡтарҙың һәр берәмегенә көмөндә 100 грамм үҙләштерелеүсе протеин тура килергә тейеш.

«Аҡһым» программаһын (борсаҡ һәм рапс ҡатышмаһын мәжбүри индереп) күп компонентлы ҡатышмалар сәсеүлектәрен киңәйтеү иҫәбенә хәл итәсәкбеҙ. Мәҫәлән, Ивановка бригадаһында көнбағыш, борсаҡ, һоло, арпа һәм рапс ҡатышмаһы. Михайловка бригадаһында арпа һәм рапс ҡатышмаһы сәселәсәк. Ундай сәсеүлектәрҙең дөйөм майҙаны 400 гектар тәшкил итәсәк, бынан тыш, рапс, 50 гектар майҙанда — орлоҡҡа, 50 гектар майҙанда — йәшел азыҡҡа һәм 100 гектар майҙанда һауын һыйырҙарын көҙгө (сентябрь—октябрь) өҫтәмә туҡландырыуға сәселәсәк. Был сәсеүлектәрҙең һәр ферма эргәһендә урынлаштырасаҡбыҙ. Аҡһым менән тулыраҡ тәьмин итеү өсөн, иген баҫыуҙары структураһын яңынан ҡарап сығырға һәм ҡүҙаҡлы культураларҙы пландағы 100 урынына 300 гектар самаһы майҙанда сәсергә кәрәк.

«Кукуруза» фәнни-производство системаһы (НПС) менән договорлашыу нигеҙендә малсылыҡты һәйбәт силос менән тәьмин итеү маҡсатында 300 гектар майҙанда силосҡа күкурузды иген технологияһы буйынса үҫтерәсәкбеҙ. Уның сәсеүлектәре Ивановка һәм Аҡташ бригадаларында буласаҡ. Был эште өс көндә тип билдәләнгән сәсеүлектәрҙе ҡабат һәм мал азыҡтары культуралары өсөн 550 тонна гранулланған минераль ашламалар кәрәк буласаҡ, шуның 190 тоннаһы интенсив технология буйынса бойҙай игеү өсөн һәм орлоҡҡа тип билдәләнгән сәсеүлектәрҙе азот ашламаларын биреү.

Минераль ашламаларҙы ҡулланыу планына ярашлы рәүештә быйыл иген һәм мал азыҡтары культуралары өсөн 550 тонна гранулланған минераль ашламалар кәрәк буласаҡ, шуның 190 тоннаһы интенсив технология буйынса үҫтерәсәкбеҙ. Уның сәсеүлектәре Ивановка һәм Аҡташ бригадаларында буласаҡ. Был эште өс көндә тип билдәләнгән сәсеүлектәрҙе ҡабат

ЕГЕТТӘР ВАТАНҒА ХЕҢМӘТ ИТӘ

Йылы хәбәр ҙә— оло бүләк

Ауыл хужалығында төрлө һөнәр кешеләре эшләй, Бүләк Торомтаев та еңелдән булмаған чабан һөнәрен һайлай. Һуғыштан һуң ҡаҡшаған хужалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыу осоронда һайлаған эшенә үҙенең бөтә ғүмерен бағышлай. Хәҙерге ваҡытта ул хаҡлы ялда. Уның наградалары ветерандың хеҙмәт юлы тураһында һөйләй. Күп йөн ҡырҡып алғаны, малдарҙы теүәл һаҡлағаны һәм ит комбинатына юғары көрлектә тапшырғаны өсөн СССР ВДНХ-һының алтын, көмөш һәм бронза миҙалдары менән наградлана, исемле алтын сәғәт менән бүләкләнә. Ул — биш йыллыҡтар ударнигы, күп һандағы Почет грамоталары. Дипломдары һәм башҡа бүләктәре бар. Бәрәс ҡараусы булып эшләгән ҡатыны Шәрифьямал Торомтаева ла уға күп ярҙам итә. Улар бергәләп алты бала: биш ул һәм бер ҡыҙ тәрбиәләп үҫтерә. Балалары бөгөнгө кендә халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында эшләй. Риф—Сибай ҡалаһында тепловоз машинисы, Наил — милиция бүлеге работнигы, Шамил — шофер, Венера—Ишимбай районында эшләй. Ә иң кеселәре — Рафаил — Совет Армияһы сафында хеҙмәт итә.

Күптән түгел Бүләк ағай һәм Шәрифьямал апай Торомтаевалар ҡыуаныслы хәбәр — улдары хеҙмәт иткән хәрби часть командованиеһынан рәхмәт хатын алдылар. Хатта шундай юлдар бар: «Һеҙҙең улығыҙ Рафаил үҙенең хәрби бурысын намыҫлы үтәй. Ул ата-әсәһенең наказына тоғро. Хәрби ант һәм Устав ҡушҡанса хеҙмәт итә.

Намыҫлы хеҙмәте менән хәрби һәм политик әҙерлек отличниғы исеменә лайыҡ булды, үҙ һөнәрен яҡшы үҙләштерҙе. Беҙҙең частың личный составы менән бергә беҙҙә уның уңыштары менән ғорурланабыҙ һәм Совет Армияһының лайыҡлы яугирен, социалистик Ватаныбыҙҙың тоғро һаҡсыһын тәрбиәләгәнегеҙ өсөн һеҙгә ҙур рәхмәт белдерәбеҙ».

Был теләктәргә беҙ ҙә шатланып ҡушылабыҙ.

М. КҮСӘКОВ.

ҺҮРӘТТӘ: беҙҙең яҡташыбыҙ Рафаил Торомтаев.

Мәктәп тормошо

ДУҪЛЫҠ КЛУБЫ

Беҙҙең интернациональ дуҫлыҡ клубы, мәктәп кеүек үк, тәүге йыл ғына эшләп килә. Клуб Америка йырсыһы һәм көрәшсеһе Дин Рид исемен йөрөтә. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уның ағзалары бик күп ҡыҙыҡлы эштәр башҡарып өлгөрҙө: теләктәшлек йәрминкәһендә, тыныслыҡ өсөн көрәш акцияларында ҡатнаштыҡ. Никарагуа балаларына ярҙам фондына посылкалар ебәрҙек. Занятиеларҙа беҙ социалистик илдәрҙең, атап әйткәндә, ГДР-ҙың тарихын өйрәнәбеҙ. ГДР-ҙың баш ҡалаһы Берлин тураһында фильм ҡараныҡ. План буйынса бик күп ҡыҙыҡлы эштәр башҡараһы бар. Проблемалар ҙа юҡ түгел. Беҙгә айырым бүлмә бирһәләр, бигерәк тә яҡшы булыр ине, сөнки башҡа илдәрҙә йәшәүсе балалар менән хат аша бәйләнеш тотоуы ауырға тура килә. Райондың башҡа интернациональ дуҫлыҡ клубтары үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлашыр, был турала даими рәүештә район газетаһына яҙып торорҙар, тип ышанғы килә. Бигерәк тә Д. Рид исемен йөрөтөүсе клубтар менән бәйләнеш тотҡобоҙ килә. Райондың бөтә интернациональ дуҫлыҡ клубтары менән бергәләп эшләһәк, тағы ла күберәк файҙалы эштәр башҡара алыр инек.

О. ШПЕНЬКОВА.
Садовый һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең йәш хәбәрсеһе.

Балыҡсылар быны белергә тейеш

1988 йылдың башында Ерекле һыу һаҡлағысында балыҡ тотоу ҡағиҙәләрен боҙоусыларҙы асыҡлау буйынса бер нисә рейд үткәрелде. Күптәрҙең Ырымбур өлкәһендә балыҡ тотоу ҡағиҙәләрен белмәүе билдәләнде.

Миҫал өсөн Магнитогорск ҡалаһынан, Башҡортостандан, Гай районынан килгән балыҡсыларҙы алып ҡарайыҡ. Бөтәһенең дә тиерлек һунарсылар һәм балыҡсылар йәмғиәтенең ағзалыҡ билеттары юҡ, барыһы ла тыйылған урындарҙа балыҡ тота ине. Ә Ҡағиҙәләрҙә былай тип яҙылған: «Росохотрыболовсоюздың 1982 йылдың 28 июлендәге Положениеһына ярашлы рәүештә һунарсылар һәм балыҡсылар йәмғиәте тарафынан балыҡ тотоу ойошторолған урындарҙа һунарсылар һәм балыҡсылар йәмғиәтенең ағзалыҡ билетын күрһәткәндән һуң ғына уларға, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары, КПСС ветерандары, I һәм II группа хеҙмәт инвалидтары, Советтар Союзы Геройҙары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, өс дәрәжә Дан һәм Хеҙмәт Даны ордендары кавалерҙарына, балыҡ һаҡлау органдарының штатлы һәм йәмәғәт инспекторҙарына һәм балыҡсылар йәмғиәтендә ағза булып тормаған 16 йәшкә тиклемге балаларға тейешле документ күрһәткәндән һуң ғына бушлай һәм путевкаһыҙ балыҡ тотоу рөхсәт ителә».

Һунарсылар һәм балыҡсылар йәмғиәте ағзалары өсөн бүленгән участкаларҙа , ғына балыҡ тотоу буйынса ярыштар ойошторорға мөмкин.

Ләкин ағзалыҡ билеттары булып, тыйылған урындарҙа балыҡ тотоусылар йыш осрай. Улар менән һөйләшкән саҡта балыҡ тотоу өсөн билдәләнгән урындарҙы белмәүҙәрен асыҡлайһың, етмәһә, был турала, тейешле яҙыуҙар юҡ, тип аҡланалар. Ләкин беҙҙә, Ерекле һыу һаҡлағысында, һәр участкала балыҡ тотоуҙың рөхсәт ителеүителмәүе тураһында яҙыуҙар бар. Улар Урал йылғаһы ярҙарына ла ҡуйылған. Ләкин һәр 200 метр һайын белдереүҙәр ҡаҙап ҡуйырлыҡ мөмкинлек юҡ.

Балыҡ тотоу участкаларының ҡайҙа урынлашыуы менән балыҡсылар һәм һунарсыларға район-ара йәмғиәтендә булған карталарҙан ҡарап танышырға мөмкин.

Балыҡсылар йәмғиәтендә ағза булып торған һәр кем быны шуларҙы белергә тейеш.

И. ЕФИМОВ,
Ерекле балыҡсылыҡ инспекцияһының участка дәүләт инспекторы.

Редактор урынбаҫары Ф. М. КОҘАБАЕВ.

Зәңгәр экран

Шаршамбы, 4 май

1-се программа

17.30 — Сәләмәт булырға теләһәң. 17.45—Беҙҙең баҡса. 18.15—Бөгөн донъяла. 18.45—«Кеше һәм закон». 18.05—Мультфильмдар. 19.10—«Ҡаланы япҡан кеше». Нәфис фильм. 20.30—Ваҡыт. 21.00—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.10—«Шиғриәт». В. Федоров. 21.55—Бөгөн донъяла. 22.00—Фильм-концерт.

2-се программа

17.35—Док. фильмдар. «Фантадром». 18.10—Балалар өсөн фильм. 18.30 «Ҙур үҙгәрештәр заманы». Яҙыусы Ғ. Аллаяров сығышы. 18.45—Партияның XIX Бөтә Союз конференцияһын ҡаршылап. «Дүрт» «С» (русса). 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! **19.45—Башҡортостан. 20.05 — Донъя картаһы янында (башҡортса).** 20.20—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 20.30—Ваҡыт. 21.00—Спорт программаһы.

Кесаҙна, 5 май

1-се программа

6.00 — 120 минут. 8.05—«Йырға тоғролоҡ». 8.30—«Яратам һине, тормош». 8.35—«Ҡаланы япҡан кеше». Нәфис фильм. 9.55—Яңылыҡтар. 10.05—«Мин, һин һәм бөтәбеҙ бергә». 10.50—«Кеше һәм закон». 11.20 — В. Шекспир. «Дауыл». Фильм-концерт. 15.15—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 15.25 — «Биш йыллыҡ: эштәр һәм кешеләр». 15.55—Концерт. 16.15—Үҙәк Америкала тыныслыҡ: өмөттәр һәм ысынбарлыҡ». 16.35—«...16-ға тиклем һәм унан өлкән». 17.20—Музыкаль хазиналар. 18.05 — Бөгөн донъяла. 18.25—«Матбуғат һәм үҙгәртеп ҡороу». 19.05—«Маршал Жуков. Биография биттәре». 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.15—Беҙҙең бурыстар. 22.30 — Бөгөн донъяла. 22.40—В. Добрынин йырҙары.

2-се программа

11.35—«Үҙәк урамдан оркестр менән». Нәфис фильм. 13.05—Документаль фильм. 13.45—«К. Маркс. Йәшлек йылдары». 7-се серияһы. 14.50 Концерт. 16.35—Документаль фильм. **17.35—«Йәйғор» программаһы. 18.30—«Музыкаль тулҡындарҙа» (башҡортса). 19.00 — Башҡортостан.** 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! 19.45—Ритмик гимнастика. 20.15—«Тәләкуца» фольклор ансамбле сығыш яһай. 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.15 — Хоккей.

Йома, 6 май

1-се программа

6.00 — 120 минут. 8.05 — Мультфильмдар. 8.35—«Мөхәббәт һәм күгәрсендәр». Нәфис фильм. 10.15—Күҙ күреп ышанмаҫлыҡ. 11.25 — «Беҙҙең бурыстар». 15.10 Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 15.20—«Агропромдың эштәре һәм хәстәрлектәре». 15.40—Ленинград телевидениеһы программаһы. 17.00 — «Ни эшләп һәм ни өсөн». 17.30—Мәктәп: үҙгәрештәр заманы. 18.15—Бөгөн донъяла. **18.35 — Башҡортостан. 18.55 — «Халыҡ-ара конфликт региондары» Афғанстан (башҡортса).** 19.15—Нәфис фильм. «Ҡыҙым». 1-се серияһы. 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.15 Нәфис фильм. «Ҡыҙым». 2-се серияһы. 22.40 — «Ҡараш».

2-се программа

9.55 — «Еңеү байрағы тураһында хикәйә». 10.05 — Б. Н. Полевой. «Ысын кеше тураһында повесть». 11.35—«Шарттарға ҡарап эш ит». Нәфис фильм. 12.40—«Ставрополь. Ҡала көнө». 13.25—Клавдия Шульженко йырлай һәм һөйләй. **16.35—Документаль фильмдар. 17.35—Балалар өсөн фильм. 17.45—Документаль фильм. «Ысын фамилияһы асыҡланмаған». 17.05—«Беҙ өсәү инек...» Телевизион спектакль (башҡортса).** 18.35 — Фильм-концерт. 19.05 — Мультфильм. 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! **19.45—«Һәр хатта — кеше яҙмышы». 20.15 — Документаль фильм. «Венецияла карнавал».** 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.15 — Шиғриәт. К. Симонов. 21.40 — Яңылыҡтар. 21.45 — Н. Шаховская уйнай (виолончель).

Шәмбе, 7 май

1-се программа

6.00 — 120 минут. 8.05—Концерт. 8.35—Ни эшләп һәм ни өсөн». 9.05—СССР-ҙа Һиндостан көндәре... 9.20—«Бәләкәй ҡалалар буйлап сәйәхәт». 10.00—Үзбәк ССР-ы дәүләт халыҡ инструменттары оркестры уйнай. 10.25—«Артем иптәш». 15.15—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 15.45 — Н. Абрамова менән А. Абрамов уйнай. 16.05—«Социализм илдәрендә». 16.35 — Мультфильм. 16.45—«Хәрби енәйәтселәр өсөн һыйыныу урыны». Док. фильм. 17.50—«Бөтәһе өсөн һәм һәр кем өсөн». 18.20—Документаль публицистик фильм. «Ябай фашизм». 1—2-се сериялары. 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.15—«Нәмә? Ҡайҙа? Ҡасан?».

2-се программа

6.35—Хәҙерге заман сәхнәһендә Бөйөк Ватан һуғышы темаһы. 9.50—Үҙгәртеп ҡороу һәм хоҡуҡ. 10.10—«Сәләмәтлек». 10.55 — «Йәшә, ерем!» 12.00—Фән: теория, эксперимент, практика. 12.30—Рус культураһы тураһында әңгәмә. 2-се тапшырыу. 13.20—Күҙ күреп ышанмаҫлыҡ. **16.55—«Экра халыҡ таланттарына». Саҡмағош районы (башҡортса).** 17.45 — «Беҙ күрше йәшәнек». Нәфис фильм. **19.00 — «Утлы йылдар тауышы» (башҡортса).** 19.30 — Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! **19.45—Бөгөн — Радио көнө, элемтәнең бөтә тармаҡтары работниктары байрамы. 20.00—Башҡортостан.** 20.30—Ваҡыт. 21.05—Үҙгәртеп ҡороу прожекторы. 21.15 — Концерт.

Йәкшәмбе, 8 май

1-се программа

7.30 — Яңылыҡтар. 7.45—Ритмик гимнастика. 8.30—«Көнсығыш себер». 8.50—«Спортлото». 9.00—Будильник. 9.30—Советтар Союзына хеҙмәт итәм! 10.30—«Иртәнге почта». 11.00—Сәйәхәтселәр клубы. 12.00—Музыкаль киоск. 12.30—Ауыл сәғәте. 13.30—Сәләмәтлек. 14.15—Шиғриәт минуттары. 14.20—Останкино концерт студияһында В. А. Караковский менән осрашыу. 16.05—Мультипликацияла фантастика. 16.35—«Ерҙә йәшәү» (Англия). 10-сы фильм. 17.30—Халыҡ-ара панорама. 18.15—«Ералаш». 18.25—Концерт. БХР. 19.00—Нәфис фильм. «Васыят». 20.30—Ваҡыт. 21.05—«Еңеү парады». 22.00—«Төрлө йылдар йырҙары».

2-се программа

7.30—Зарядкаға баҫ! 7.45—А. Сурков шиғриәте. 8.35—Фәнни-популяр фильм. 9.20—Һөнәр һайлағанда. 9.50—Һоҡланғыс кешеләр тормошо. Академик А. М. Бах. 10.30—«Совет власының беренсе декреты». 11.00—Сәйәхәтселәр клубы. 12.00—«Һалдаттар йырлағанда». 15.05—Хоккей. 17.30—«Мин яратам, һине, тормош». 17.35 — Док. фильм. 17.55—Концерт. 18.05—Киноафиша. 19.05—«Һеҙ хәҙер ҡайҙа...» 19.15—«Кохети» фольклор ансамбленең сығышы. 19.30—Тыныс йоҡо, кескәйҙәр! 19.45 — Берлинда ҡунаҡта. 20.30—Ваҡыт. 21.05 — Сит ил фильмы экранда. «Миңә 19 йәш ине».

«Маҡан» совхозының дирекцияһы, парткомы, профкомы, ВЛКСМ комитеты һәм халыҡ депутаттарының Маҡан ауыл Советы башҡарма комитеты хеҙмәт ветераны

Хәҙисә Ғибәт ҡыҙы КӘИПОВАНЫҢ

үлеп ҡалыуы сәбәпле, мәрхүмәнең ғаиләһе, туғандары һәм яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Хәйбулла РОНО-һы, мәғариф работниктары профсоюзы райкомы, 2-се Аҡъяр урта мәктәбенең уҡытыусылар коллективы уҡытыу бүлеге мөдире Л. Р. Зиннурованың атаһы

Рәхимйән Сабирйән улы ҠАРАБАТЫРОВТЫҢ

үлеп ҡалыуы сәбәпле, уның һәм туғандары менән яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Бүребай урта мәктәбенең уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективы АТС начальниғы А. И. Мишенконың ҡатыны, ә уҡыусылар Дим һәм Таня Мишенколарҙың

Ә С Ә Л Ә Р Е

үлеп ҡалыуы сәбәпле, уларҙың ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Байғусҡар ауыл Советы башҡарма комитеты, Калинин исемендәге колхоз идараһы, партбюроһы ауыл Советы башҡарма комитеты секретары Р. А. Дәүләтбаеваның атаһы

Әҙеһәм Әбүзәр улы ҠОЯШБАЕВТЫҢ

үлеп ҡалыуы сәбәпле, уның ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша.

Газетаның был номерын А. МӘМБОТОВА йыйҙы, У. РӘХИМОВА версткаланы, А. КҮЛБАЕВ, Б. ФӘТТӘХОВ баҫты. Корректоры — М. ИШБУЛДИНА.

БЕҢҙЕҢ АДРЕС: Аҡъяр ауылы, Сиҙәмселәр проспекты, 41.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, партия тормошо бүлеге — 2-13-97, редакторҙың дубляж буйынса урынбаҫары, яуаплы секретарь—2-15-95, ауыл хужалығы бүлеге—2-16-95, радиохәбәрсе—2-14-95, хаттар бүлеге—2-13-95, фотохәбәрсе, бухгалтерия—2-14-98.

Газета аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус телдәрендә сыға.

Орган Хайбуллинского райкома КПСС и районного Совета народных депутатов БАССР.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Тиражы 2594. Заказ № 321.